*Фәнзил САНЬЯРОВ,*
*филология фәндәре кандидаты,*
*БДУ доценты*

Ир кәҙерен ил белер

# Ир ҡәҙерен ил белер


*Рим Сәйетбаттал улы Искәндәров*

Халҡыбыҙҙа, ил-йортобоҙҙа боронғо замандарҙан уҡ батырҙарын, аҡыл эйәләре һәм сәсәндәрен, илгә хеҙмәт итер булдыҡлы ирҙәрен ҙурлау, алғышлау кеүек матур йолалар йәшәп килгән. Шуғалыр ҙа телебеҙҙә “ағас емеше менән, әҙәм эше менән”, йәки “алтын алма, алғыш ал” кеүек тапҡыр мәҡәл-әйтемдәр һаҡланып ҡалған. Шөкөр, бөгөнөбеҙҙә лә шулай: республикабыҙҙа хеҙмәт батырҙарын, яҙыусыларҙы һәм ғилем маһирҙарын, донъя ауырлығына зарланмай, ил киләсәген ҡайғыртҡан ишле ғаиләләрҙе, әсәләрҙе данлау, маҡтаулы исемдәр, орден-миҙалдар менән бүләкләү кеүек йолағәҙәттәр күркәм традицияға әүерелде. Мәҡәлдәгесә: эше хаҡтың — йөҙө аҡ.

Кешенең бәхете, йондоҙло сәғәттәренә илтер юлы — үҙ ҡулында. Ғүмер йылъяҙмаларын, биографияһын да әҙәм үҙе яҙа. Берәүҙәрҙән аҡ ҡағыҙҙа тигеҙ юлдар ҡала, ғүмерҙәр матур үтелә. Бәғзеләрҙең яҙғаны — йәшәүҙе аҙҙырғаны-туҙҙырғаны… Тәүгеләренә береһе лә буштан-буш бирелмәй, ғүмерҙең һәр бер үренә күтәрелер өсөн көндәлек тырыш хеҙмәт, үҙ эшенә бирелгәнлек, фиҙакәрлек кәрәк. Үҙ мәшәҡәтең ил хәстәре, халыҡ мәнфәғәте кеүек ҡиммәттәргә барып тоташыу кәрәк. Шул сағында ғына ир ҡәҙерен ил белер.

Беҙ бөгөн шундай шәхестәребеҙҙең береһе — Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, СССР һәм Рәсәй мәғариф алдынғыһы, филология фәндәре кандидаты, ярты быуат ғүмерен балалар уҡытыуға, мәктәп етәксеһе булыуға арнаған Рим Сәйетбаттал улы Искәндәров хаҡында һөйләмәксебеҙ.

Арҙаҡлы педагог, уҡытыусы-ғалим, билдәле йәмәғәт эшмәкәре Р.С.Искәндәров 1931 йылдың 28 февралендә Ҡырмыҫҡалы районының Биш-

ауыл-Уңғар ауылында тыуған. Ата-әсәһе Сәйетбаттал олатай һәм Мәхүпъямал инәй ауылдаштары араһында эшһөйәрлеге, иман-тәрбиәле булыуҙары менән айырылып торған. Ғаилә лә ишле: береһенән-береһе уңған алты бала тәрбиәләнә.

Яҙмыш, яҙмыш… Кешеләрҙе һынамаҡҡа, ир-егетте ир итмәккә яҙылалыр был яҙмыштар… Бәләкәй Рим донъяға килгән йылда уҡ, атаһы Сәйетбаттал эш өҫтөндә, Ағиҙел аръяғында ятҡан Охлебининонан таҡта тейәп ҡайтышлай, арба аҫтында ҡалып, фажиғәле һәләк була. Ҡайғылар ни тиклем ауыр булмаһын, Мәхүпъмал инәй ҡаушап ҡалмай: балаларҙы тәрбиәләү, уҡытып, кеше итеү хәстәрен иңдәренә һала. Өлкәне Йомағужа заманына күрә белемле — ветеринария фельдшеры, ҡыҙҙары Әминә колхоз йәштәре мәктәбен тамамлай, Сәбилә — маҡтаулы хеҙмәт эйәһе, уҡытыусы булып китә. Ғайсар һәм Раян мәктәптә уҡып йөрөйҙәр, ҡул араһына кереп, ярҙамлашырға тырышып яталар. Рим генә бигерәк сабый әле…

Булыр бала биләүҙән үк билдәле тигәндәй, уныһы ла ҡайҙан һөнәр үҙләштереп алған?! Баҡтиһәң, балыҡсы Усман бабаһы янына эйәләшеп, нәрәтә-ау бәйләргә, мурҙа яһап, балыҡ тоторға өйрәнгән. Һөнәре Римгә ярап ҡала: аяуһыҙ һуғыш йылдарында, йот мәлендә Талпаҡ, Ҡайырлыкүл балыҡтары арҡаһында ғаилә имен йәшәй, аслыҡҡа бирешмәй. Әйткәндәй, был әүәҫлеген Рим уҡытыусы, мәктәп директоры булып киткәс тә ташламай. Ҡомары тәбиғәт менән яҡын мөнәсәбәткә инеүгә булыша, үҙенә күрә күңел гармонияһына әүерелә.

Ил күргәнде, халыҡ кисергәнде уртаҡлашып йәшәй Римдәр ғаиләһе. Ғаиләнең оло тәрәге, башлы-күҙле булырға ла өлгөрмәгән Йомағужа ағаһы фин һуғышында, сит ерҙәрҙә ятып ҡала. Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән, ун ете йәшлек Ғайсар илбаҫарҙарға ҡаршы яуға китә, Ватан именлеге өсөн ҡыйыу һуғыша, Берлинғаса етә. Ошондай саҡта ла уҡып кеше булыу уйы ташламай Римде. Мәхүпъямал инәй ҙә: “Белемле үлмәҫ, белемһеҙ көн күрмәҫ”, — тип, ғилемгә ынтылған, сос һәм отҡор төпсөгөн дәртләндереп тора.

Рим Искәндәров 1949 йылда тик “яҡшы” билдәләре менән Биш-ауыл-Уңғар урта мәктәбен тамамлай. Белемле егетте ситкә ебәрмәйҙәр, мәктәптә математика уҡытыусыһы итеп ҡалдыралар. Әммә дипломһыҙ уҡытыусы булып йөрөүҙе хушһынмай йәш уҡытыусы. Шуға ла 1950 йылда Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтына уҡырға инә. Ең һыҙғанып белем эстәүгә, уҡытыусы эшенең бар нескәлектәрен үҙләштереүгә тотона. Абруйлы, әммә үтә яуаплы уҡытыусы һөнәрен һайлауға ҡыуанып бөтә алмай. Тәү ҡарауға, уҡытыусылыҡ эше таныш та кеүек. Бер килке, Сәбилә апаһына иптәшкә була, райондың Алайғыр ете йыллыҡ мәктәбендә уҡып та, йәшәп тә ала. Апаһының дәрескә әҙерләнеүҙәрен, дәрестәрҙән арыбыраҡ, әммә шат йылмайып, дәртләнеп ҡайтып кереүҙәрен күрә-тора йөрөй. Мәктәпкә, балаларға эҫенеү шунан башланманымы икән?

Яратҡан эшенән Совет Армияһы сафтарындағы хеҙмәте лә айырманы Рим Искәндәровты. Полтава ҡалаһындағы авиация часында ла үҙ

иттеләр белемле сержантты. Тәҡдимдәр ҙә булманы түгел. Һалдат хеҙмәте тамамланыу менән, үҙ иленә, төйәгенә ынтыла Рим. Ҡырмыҫҡалы районы мәғариф бүлеге йүнәлтмәһе менән Күлдәр, артабан яҙмышына, тыуған төйәгенә әйләнер Үтәгән ауылы мәктәбенә ебәрәләр. Ошонда төпләнә Рим Сәйетбаттал улы. Һөймәлекле, тәрбиәле егетте уҡыусылар, ауыл халҡы тиҙ арала үҙ итә, яҡын күрә. Йәш уҡытыусы ла Үтәгәндә оҡшата. Ауыл бик тә йыйнаҡ, халҡы ла ипле. Ә тәбиғәте! Ағиҙел, һыубаҫар туғайҙар, ҡаршыла ғына күккә олғашып торған Мағаштау — бөтәһе лә хуш килә күңеленә. Ағиҙел һылыуы, фельдшер Зәкирә Хөсәйенова менән таныша, тиҙҙән йәштәр ҡауыша. Ҡәйнәһе Әсҡәпъямал инәй менән бергәләшеп, бик татыу йәшәп китәләр. Бер-бер артлы ҡәҙерле балалары Айгөл, Айрат донъяға килә. Йәштәрең һыҙғанып эшләй, донъя көтөргә лә өлгөрә. Балалар ҡараулы, өләсәй тәрбиәһендә әҙәпле, иманлы булып үҫеп китәләр.

Рим Сәйетбаттал улы мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эш башлай. Артабан да уҡыу теләге уйынан сыҡмай, алдына төплө белемле филолог булыу маҡсатын ҡуя. 1957 йылда ситтән тороп Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡый башлай. Уға мәшһүр ғалимыбыҙ Ж.Ғ.Кейекбаев, йәш ғалимдар Ғ.Ғ.Сәйетбатталов, М.В.Зәйнуллин, А.Ә.Ғәлләмов, Н.Х.Ишбулатовтарҙа уҡыу бәхете тейә. Башҡорт һәм дөйөм тел белеменең теоретик нигеҙҙәрен ҡыҙыҡһынып өйрәнә, ә практик яғын мәктәптә камиллаштыра, тәжрибәле уҡытыусыларҙың дәрестәрен өйрәнә. Шуға ла был йылдарҙы Рим Сәйетбаттал улы “сынығыу йылдары” тип хәтергә ала.

Юғары белемле филологты район мәғариф бүлеге 1962 йылда Үтәгән һигеҙ йыллыҡ мәктәбе директорының уҡытыу-тәрбиә эше буйынса урынбаҫары итеп үрләтә. Йәш белгес бындай яуаплы эшкә дәртләнеп тотона, коллегаларының дәрестәренә инә, анализлай, үҙе лә асыҡ дәрестәр бирә башлай. Рим Сәйетбаттал улы бындай “мастер-класс”тарын директор, уҡытыусы-ғалим булғас та ташламай, район, республика кимәлендә әленән-әле үткәреп тора.

Талантлы уҡытыусы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының район методик берекмәһе етәксеһе булараҡ та ҙур ойоштороу эштәре башҡара. 1970 йылдар башында уҡ республикала иң тәүге башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинетын йыһазландыра. Уның эшен ойоштороуҙың методологик нигеҙҙәрен формалаштыра. Алдынғы педагогик тәжрибә районда ғына түгел, ә бөтә республикала ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра.

— Шул осорҙа мин Ҡырмыҫҡалы районында яуаплы вазифа башҡарҙым, — тип хәтерләй Рәсәй мәғарифы алдынғыһы Ф.Ҡ. Әсәҙуллина. — Рим Сәйетбаттал улы иҫ киткес егәрле мәктәп директоры, һоҡланғыс уҡытыусы булды. Үтәгән һигеҙ йыллыҡ мәктәбен типовой итеп төҙөттө. Берҙәм һәм татыу педагогик коллектив тупланы. Мәктәп коллективы бөтә йәһәттән дә өлгөлө булды. Беҙ үҙ-ара шаяртып: “Үтәгәндәр барыһын да үтәгән”, — ти торғайныҡ, сөнки бөтә күрһәткестәр буйынса ла мәктәп тиҫтәләрсә йылдар буйына алдынғылыҡты бирмәне.

Оҫта ойоштороусы, рухлы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһын БАССР Халыҡ мәғарифы министрлығында ла яҡшы беләләр, эшен баһалайҙар. Министрлыҡ белгестәре йыш ҡына мәктәптә була, етәксенең идара итеү стилен, уҡытыу оҫталығын өйрәнә. Республика кәңәшмәләрендә Р.С.Искәндәров исеме йыш ҡабатлана, үҙенә лә сығыштар яһарға тура килә. Аҡрынлап ижади эшләүсе уҡытыусыны, мәктәп директорын, ҡала һәм райондарҙа үткән сараларға йәлеп итәләр. Республика, күрше өлкәләрҙәге күп кенә башҡорт һәм милли мәктәптәрҙе йөрөп сыға, тәжрибәһе менән ихлас уртаҡлаша һәләтле педагог.

Рим Сәйетбаттал улы сирек быуат “Башҡортостан уҡытыусыһы” журналының иң әүҙем авторҙарының береһе була. Уның эш тәжрибәһен, тел һәм әҙәбиәт уҡытыуҙың көнүҙәк проблемаларын сағылдырған мәҡәләләре һәр ваҡыт актуаллеге менән айырылып тора. Р.С.Искәндәровтың 1984 йылда “Башҡортостан уҡытыусыһы” журналының лауреаты булыуы бер ҙә ғәжәп түгел.

Шуғалыр ҙа 1980 йылдарҙа БАССР Халыҡ мәғариф министрлығы Рим Сәйетбаттал улын уҡыу дәреслектәре авторҙары коллективы эшенә йәлеп итә. Тәжрибәле уҡытыусы Ғ.И.Рамазанов, Ғ.С.Ҡунафин, Ғ.Б.Хөсәйеновтар менән авторҙаш була. Ижади төркөм урта мәктәптең IX синыфтары өсөн “Әҙәбиәт-хрестоматия” (Өфө, 1990), “Башҡорт әҙәбиәте: IX синыф өсөн дәреслек” (Өфө, 1990), “Туғыҙынсы синыфта башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу: методик ҡулланма” (Өфө, 1992), “Башҡорт әҙәбиәте: дәреслек” (Өфө, Китап, 1994) әҙерләп сығара. Бында ла уҡытыусы-практик Рим Искәндәров талантының өр-яңы һыҙаттары асыла.

БАССР халыҡ мәғарифы министры Сабир Шәйәхмәт улы Йыһаншин һөйләгәне:

— Рим Сәйетбаттал улы хаҡында йылы хәтирәләр һаҡлайым. Ул республикабыҙҙа иң сағыу мәктәп етәксеһе, уҡытыусы булды. Беҙ уны эшһөйәрлеге, интеллигентлығы, оҫталығы арҡаһында байрағыбыҙ итеп йөрөттөк. Мәктәп етәкселәре араһында тәүгеләрҙән булып филология фәндәре кандидаты дәрәжәһенә диссертация яҡланы. Мин тағы шуға һоҡланам: ваҡыты ни тиклем генә тығыҙ булмаһын, Рим Искәндәров яҡташы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың исемен мәңгеләштереү, ҡәберзыяратын тәртиптә тотоу мәсьәләләрен дә ил күләмендә күтәреп сыҡты. Был уның оло шәхес булыуы хаҡында һөйләй...

Рим Искәндәров профессор, филология фәндәре докторы Ғ.Ғ.Сәйетбатталов етәкселегендә 1980 йылда ”Сәғит Ағиш әҫәрҙәренең теле” темаһына кандидатлыҡ диссертацияһын яҡланы. Тикшеренеүҙәрҙең ғилми әһәмиәте шунда: диссертант башҡорт тел белемендә тәүгеләрҙең береһе булып яҙыусының тел һәм стиль үҙенсәлектәрен функциональ-семантик аспектта өйрәнде. С.Ағиш әҫәрҙәренең теле ифрат бай, халыҡсан. Тәрән фактик материалдар нигеҙендә ғалим яҙыусының хикәйәләү маһирлығы серҙәрен, лексик-методологик һәм стилистик үҙенсәлектәрен асып биреүгә иреште. Диссертация был өлкәләге артабанғы ғилми тикшеренеүҙәрҙә файҙалы сығанаҡ булып тора. Заманында был хеҙмәткә

академик З.Ғ.Ураҡсин, филология фәндәре докторы Р.З.Шәкүров юғары баһа бирҙе.

Күрәһең, башҡаларҙан алда барыу, юл ярыу абруйлы ир-егеттең, оло шәхестәрҙең өлөшөләр. Өлөшөңә төшкән көмөшөң шул икән, ғүмер үрҙәрен артылыуың да шул юҫыҡта бара. Ваҡытында теҙгендәрҙе бушатһаң да мөмкин. Ғүмер уртаһына бөтәһе лә ирешелгән, үтәгәндәр әйтмешләй, үтәлгән: Башҡортостан мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы, СССР һәм Рәсәй мәғарифы алдынғыһы. “Учительская газета” эш тәжрибәһен, педагогик абруйын бөтә илгә таратты. Ил-халыҡ үҙенең арҙаҡлы ирҙәренең береһе тип таный.

Әммә туҡтап ҡалыу, һәүетемсә йәшәү Рим Сәйетбаттал улына хас түгел. Әле беләктә көс, йөрәктә дәрт бар. Мәктәп директоры Үтәгәндә урта мәктәп булдырыу, яңы ике ҡатлы мәктәп бинаһы, балаларға спорт залы төҙөтөү идеяһы менән яна башлай. Заманы ла ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе, мәктәп төҙөүҙең формаль яҡтары Мәскәүҙә түгел, ә республикала хәл ителә башланы.

— Мәктәпте киңәйтеү, ике ҡатлы уҡыу корпусы, спорт залы мәсьәләһе менән Республика Президенты М.Ғ.Рәхимовтың үҙенә мөрәжәғәт иттем, — ти Р.С.Искәндәров. — Президентыбыҙ бер һүҙҙән аңланы, төҙөлөш материалдары, финанс яғынан тәьмин итеүҙе Ауыл хужалығы министрлығына йөкмәтте, төҙөлөш эштәре барыу менән ҡыҙыҡһынып торҙо. 1995 йылда балалар яңы мәктәптә уҡый башланы.

Тәү ҡарамаҡҡа ғына бөтәһе еңел күренә. Асылда, Рим Сәйетбаттал улы үҙенең шәхси машинаһында аҙ сапманы Белорет, Өфө, Стәрлетамаҡ ҡалаларына. Кәрәк икән, йөк машинаһына ултырып, шоферҙар менән бергә материалдар ташыны, бушатты. Иң мөһиме шул: ҡайҙа барһа ла яҡлау-хуплау тапты.

Ошондай тығыҙ ваҡытта ла Р.С.Искәндәров уҡытыу эшенә һыуынмай. Мәктәптә өлгөлө дәрестәр үткәрә, уҡыусыларға тәрән белем, тәрбиә һабаҡтары бирә. Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтында курстар үткәрә, тәрән йөкмәткеле лекциялар уҡый. Быларҙың барыһына ла ихлас һоҡланырға мөмкин. Ә илебеҙ, республикабыҙ етәкселеге һоҡланып ҡына ҡалмай, фиҙакәр хеҙмәте өсөн 1993 йылда уҡытыусы-ғалимға “Рәсәйҙең атҡаҙанған уҡытыусыһы” исеме бирелә. Был наград һирәктәрҙең өлөшө.

БАССР халыҡ мәғарифы министры урынбаҫары Р.М.Арыҫланов һөйләгәне:

— Арҙаҡлы педагог Рим Сәйетбаттал улы менән яҡындан 1985 йылда Вьетнамға бер айлыҡ туристик сәфәргә барғанда таныштым. Мин 21 кешелек төркөмдөң етәксеһе, старостабыҙ — Рим Искәндәров. Ул үҙенең талапсанлығы, йор һүҙлеге, ойоштороу һәләте менән төркөмдөң үҙ кешеһенә әйләнде. Ялыбыҙҙы оҫта ойошторҙо. Вьетнамдар менән бергә балыҡ һөҙөп йөрөүе уның ни тиклем дә ябай, эскерһеҙ булыуы хаҡында һөйләй. Римде бер нисә тапҡыр Өфөгә, министрлыҡҡа, йә БИУУ-ға эшкә саҡырҙыҡ, шулай ҙа ауылдан, мәктәбенән айыра алманыҡ…

Эйе, айырылманы ауыл балаларынан, мәктәбенән, ауылдаштарынан. Ҡаҡҡан ҡаҙыҡтары ныҡлы береккәндер Үтәгәнгә. Хаҡлы ялға сыҡҡас та ҡалдыра алмай торҙо ятраҡан эшен.

Донъяһы етеш, ғаиләһе татыу булды, күптәргә өлгө күрһәтеп йәшәне Искәндәровтар. Ҡыҙҙары Айгөл БДУ-ның математика факультетын тамамланы, Өфөнөң 18-се һанлы мәктәбендә уҡыта. Тормош иптәше, физика-математика фәндәре докторы, БДУ профессоры Әхтәр Мағаз улы Ғайсин менән ике бала үҫтерә. Айрат БДУ-ның филология факультетын ҡыҙыл дипломға, Силәбе мәҙәниәт институтын да уңышлы тамамлай, яңы һөнәр үҙләштерә. Ул бөгөн Өфө ҡалаһы Совет районы хакимиәтендә бүлек етәксеһе, район башҡорттары ҡоролтайы рәйесе. Ҡатыны, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Зифа Зыя ҡыҙы менән улдары Асҡарҙы үҫтерәләр. Ата-әсәһен, ҡайны-ҡәйнәһен ҡыуандырып, Өфөнән аҙна һайын тиерлек ҡайтып тора балалар. Олоғайған көндәрҙә ошонан да ҙур шатлыҡ бармы икән?! Ял көндәрендә Зәкирә ханым, Рим Сәйетбаттал улы ейәндәре Рәшит, Ғәлиә һәм Асҡарҙы яратып бөтә алмай. Ярай әле өй-ихата иркен, тәбиғәт йәмле. Йәй буйы балалар Ағиҙелдә балыҡ ҡармаҡлай, баҡсала ярҙамлашырға ынтылып тора.

Өлгөр һәм тырыш булды хеҙмәт ветерандары Зәкирә Батыргәрәй ҡыҙы һәм Рим Сәйетбаттал улы. Әле 1980 йылдар башында уҡ икенсегә өй һалып керергә булдылар. Тырышҡан тапҡан, ташҡа ҡаҙау ҡаҡҡан. Әллә ҡайҙа ятҡан Белорет урманынан делянка алыу, оҫталарҙан бураныу, ауылға йөк машиналарында ташытыу — һанай китһәң, йорт бөтөрөү мәшәҡәтен үҙе төҙөгән генә беләлер. Бик ҙур сыҡты һалған өйҙәре. Ауылды йәмләп ултыра. Ир хәстәрле булһа, ҡатын таҫтарлы булыр. Йорт эсе лә, ихата ла һәр саҡ тәртиптә. Баҡсалары йәйгеһен шау сәскәлә. Алмаһы, емеш-еләге ишелеп уңа. Бал ҡорттары йәйге сыуаҡ көндәрҙә бал ташып өлгөрә алмай. 1995 йылда районда үткәрелгән “Иң яҡшы шәхси йорт” конкурсында Искәндәровтарҙың беренсе урын алыуы һис тә осраҡлы түгел.

Хеҙмәте ни тиклем тынғыһыҙ булмаһын, Рим Сәйетбаттал улының йәнә бер һөнәре бар — ул һәүәҫкәр умартасы. Ғүмере буйына Үтәгәндә күпләп бал ҡорто үрсетте, ҙур табыштар алып йәшәне. Башҡорт ҡортон пропагандалау, эш тәжрибәһе менән уртаҡлашыу буйынса ла районның “Хеҙмәт даны” гәзите биттәрендә бихисап мәҡәләләр менән сығыш яһаны. Белгәнде эшләт, белмәгәнде өйрәт тигәндәй, күптәргә бал ҡорттарын үрсетеүҙә шәхси ярҙам күрһәтте. Шундайҙарҙың береһе — Шәрипҡол урта мәктәбе директоры Рәфис Бәширов. Өйрәнсек үҙе бөгөн тиҫтәнән ашыу умарта тота, һөнәрсегә әйләнеп китте, күрштирәгә күс ябышып бирә.

Арҙаҡлы уҡытыусы, мәктәп етәксеһе, ғалим кешегә хаҡлы ялда тыныс ял итәһе лә бит. Ҡайҙа инде! Ветеран-педагог бөгөн дә сафта. Мәктәптә эшләү йылдарында ул крайҙы өйрәнеү музейы булдыра, әле ошо музейҙың алыштырғыһыҙ директоры. Музей менән Өфөлә, Малаяҙҙа,

Ҡырмыҫҡалы, Шайморат һәм башҡа урындарҙа ҡатнаша. Ҡайҙа ғына булмаһын, халыҡтың иғтибарын һәм ихтирамын яулай.

Уҡытыусы-ғалим музейында күп тапҡырҙар Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың да булғаны бар. Музей менән танышҡан арала Президентыбыҙ уҡытыусы-ветеранға һорауҙар бирергә өлгөрә. Ил етәксеһен барыһы ла ҡыҙыҡһындыра: иген үҫәме, халыҡ ни эш бөтөрә, ҡош-ҡорт, малтыуар ишәйәме?

— Бындай социаль-сәйәси мәсьәләләрҙә республика етәксеһе менән ҡараштарыбыҙ тап килә. Ул тураһын һорай, мин дөрөҫөн яуаплайым, — ти Р.С.Искәндәров. Президентыбыҙҙың эшһөйәрлегенә, иғтибарлылығы һәм ябайлығына һоҡланыуын да йәшермәй уҙаман. — Ҡырмыҫҡалыға бер килгәнендә ауылға газ үткәреү мәсьәләһе менән ҡыҙыҡһынды. “Шөкөр, Үтәгән газлы хәҙер”, тим. “Үҙеңә лә үттеме?”, ти Президент. “Юҡ, 40—50 метр торба етмәй ҡалды”.

Ул саҡтағы район хакимиәте башлығы Х.Х.Шәһиевҡа ике-өс көндә газ үткәрергә, эшләп бөткәс үк, шылтыратырға бойороп китә Мортаза Ғөбәйҙулла улы. Хәҙер биш-алты йыл йәшәй рәхәттә уҡытыусы-ветеран ғаиләһе. Ир ҡәҙерен ил белер, тигәнең ошо инде…

Уҡытыусы-ғалимдың йәнә бер яғын асмаһам, уны ҡылыҡһырлауым тулы булмаҫ кеүек. Бәлки, күптәргә сәйер тойолор, әммә төптән уйлаһаң, уҡытыусының, кисәге мәктәп етәксеһенең Үтәгән мәхәлләһенең имам-хатибы булып китеүе изге ғәмәл, минеңсә. Бына биш йыл инде, Миңнеәхмәт Байгилдин хәҙрәт гүр эйәһе булғас, ул ошо изге бурысты атҡарып килә. Халыҡ ышанысын белдергәс, һайлап ҡуйғас, тыңламай ҙа булмай. Иман таратыу — шул уҡ ғилем-тәрбиә биреү бит. Бәләкәйҙән иман тәрбиәһе алған, иҫке төркиҙе танығаң тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһының изге эшкә тотоноуы — үҙе сауап.

Үтәгәндә мәсет төҙөү эше бөтөп бара. Таштан ике мәктәп төҙөткән етәксегә мәсет һалыу эше ҡатмарлы түгел кеүек. Теләктән элек терәк кәрәк. Терәге — ауылдаштары, Үтәгән халҡы. Иғәнә йыйыуҙан, өмәһенән бер ҙә баш тартып тормайҙар. Мәҫәлән, Тайгинова Финә әбей йыйылып киткән байтаҡ ҡына пенсияһын теләп мәсеткә индерҙе, ниәтләгән булған икән. Эшҡыуар Әлфәт Әсфәндиәров аҡсалата һәм төҙөлөш материалдары менән ярҙам итеп тора. “Урал” ауыл хужалығы кооперативы рәйесе Салауат Нафиҡовҡа, Ҡырмыҫҡалы районы хакимиәте башлығы Хәмзә Рәйес улы Әхмәтовҡа рәхмәтле үтәгәнлеләр.

Ошондай ил-йорт мәшәкәттәре, халыҡ мәнфәғәте менән йәшәү, үтә тынғыһыҙлығы, бөтмөрлөгө һәүетемсә генә йәшәп ятырға бирмәйҙер уҡытыусы, педагогик хеҙмәт ветераны Рим Сәйетбаттал улы Искәндәровҡа. Әйҙә, ил ҡәҙерен хаҡ яулаған ир-уҙаманға 75 йәшлек юбилейы менән ҡотлауҙар яуҙырайыҡ, үҙенә, ғаиләһенә ҡоростай таҙалыҡ теләйек. Ил ҡәҙерен тойоп, хәл ҡәҙәре халҡыбыҙға хеҙмәт итеүен юрайыҡ.